Бала менән мөғәмәләлә артыҡ иркәләүгә лә , шулай уҡ ғәҙәттән тыш талапсанлыҡҡа ла юл ҡуймау хәйерлерәк. “Алтын уртаҡ” тактикаһынан ҡайһы ваҡыт көләләр, әммә был осраҡта шунан да яҡшы кәңәш биреп булмай.

## Артыҡ иркә бала ниндәй була?

Ул – физик һәм рухи көс һалыуға күнекмәгән, тормош бары тик кәйеф – сафа ҡороуҙан ғына ғибәрәт, уға был рәхәттәрҙе башҡалар бирергә тейеш, тип уйлаусы бала. Артыҡ иркә бала бер ҡасан да үҙенең яҡындарының талапсан тауышын ишетмәгән. Шуға күрә уның үҙ – үҙенә талап ҡуя алмауы ла ғәжәп түгел. Үҙенең һәр еңмешлеге ҡәнәғәтләндереләсәген иһә ул яҡшы белә.

Ә бына сиктән тыш талапсан шарттаҙа үҫкән баланы (ул күберәк атаһы яғынан була, ә кәрәгенән артыҡ иркәләүгә әсәйҙәр йомарт) артыҡ иркәләү йүгәнһеҙләндерһә, ҡырыҫлыҡ бойоҡтора һәм уҫалландыра. Балалан хәленән килмәгәнде талап итеү унда сараһыҙлыҡ, көсһөҙлөк тойғоһы тыуҙыра. Бойоҡлоҡ та шунан килә. Ләкин шул ваҡытта ата – әсәгә ҡарата ла, тирә – йүндәге башҡа кешегә лә ҡарата ҡурҡыныс рәхимһеҙлек барлыҡҡа килә. Әлбиттә, мәктәпкәсә йәштә был әле рәхимһеҙлектең орлоғо ғына, ә инде йәш үҫмерҙәрҙе ул шытып сыға башлай. Өйҙә кәмһетелгән һәм рәнйетелгән баланың башҡа урында үҙенең берәүгә лә бойһонмаҫҡа мөмкинлеген, улай ғына түгел, үҙе хөкөм йөрөтөргә хаҡлы икәнлеген иҫбатларға тотоноуына ғәжәпләнергә кәрәкме икән?

Наҙлау – иркәләү һәм талапсанлыҡтың самаһын үҙегеҙгә табырға һәм шуға таянырға тырышырға тура киләсәк.

Балала үҙенә, үҙенең көсөнә ышаныс тыуҙырыу шул тиклем мөһим! Тартҡылап, киҫәтеп, һуҡранып тәрбиәләү – насар тәрбиә. Сабыйҙың бәләкәй генә уңышын да наҙлы йылмайып, ҡыҙыҡһындырып, йылы һүҙ әйтеп хуплау яҡшыраҡ һөҙөмтә бирә. Артыҡ иркәләү менән быны бер ниндәй уртаҡлығы ла юҡ. Артыҡ иркәләү баланы бөтөнләй алға әйҙәмәй, унда уңыштарға ирешеү өсөн бер ниндәй ынтылыш тыуҙырмай. Сабый өсөн нимәгәлер ирешеүен тойоуҙың әһәмиәте ғәйәт ҙур: ул үҙенә ышанырға, тағы ла ҙурыраҡ уңыш яуларға тырыша. Бары тик нимәгәлер ынтылған балалар әүҙем шәхес булып етлегә. Әгәр бала үҙен “күрһәтергә” тырыша икән, был хәл унда мотлаҡ тәкәбберлек, маһайыу тыуҙырасаҡ, тип уйламайыҡ, быны өсөн уны шелтәләмәйек. Тәкәбберлек һәм маһайыу барыһынан да бигерәк башҡа

балалар менән мөнәсәбәткә  – дөрөç булмаған мөнәсәбәткә бәйле, ләкин һис тә үҙен таныу өсөн түгел.

Һеҙ бала алдында ҡуя торған бурыстар уның өсөн башҡарып сығырлыҡ, һеҙҙең талаптарығыҙҙы ла үтәй алырлыҡ булһын. Ғәҙәттән тыш ҡартмарлы бурыстарҙы ул хәл итә алмаясаҡ – уңышһыҙлыҡтың аяныслы яғы бына шунда. Бер тапҡыр уңышһыҙлыҡҡа осрау уның ышанысын ҡаҡшатасаҡ, ҡыйыуһыҙлығын арттырасаҡ. Һәм хәҙер инде ул хәленән килерлек эште лә еңел сыға алмаясаҡ.

Икенсе сиккә етеү ҙә хәүефле. Әгәр беҙ бала алдына еңел үтәлерлек талаптар ғына ҡуйһаҡ, унда үҙ – үҙенә сикһеҙ ышаныу барлыҡҡа киләсәк. Ихтимал, киләсәктә был уның холҡонда тотороҡһоҙ һәм йәмһеҙ сифатҡа әйләнер йә иһә ысын ауырлыҡтар менән осрашҡанда емерелер.

Бала аяҡҡа баçыу менән (һүҙҙең тура һәм күсмә мәғәнәһендә) унда үҙенең теләктәрен сикләй белеү, башҡа кешеләрҙең теләктәре менән дә иçәпләшә белеү, йәлләү, ихтирам итә белеү, бащҡа бала менән уйынсығын йәки татлы ризығын бүлешеү кеүек сифаттар булдырыу өсөн тырышырға кәрәк.

Ғаиләлә ыңғай эмоциональ мөхит булдырыу хаҡында ҡайғыртығыҙ. Был һеҙҙең өсөн дә, сабый өсөн дә мөһим.